# *ӘСӘЙ, ӨЛӘСӘЙ ТУРАҺЫНДА ШИҒЫРҘАР*

Яҙ килде, яҙ килде,
Донья ҡабат уянды.
Ҡояш йылмайҙы, көлдө,
Балалар ҡыуанды.

Яҙҙың беренсе байрамы
Ул әсәйҙәр байрамы.
Бүләк итәм әсәйемә
Бер ҡосаҡ гөлләмә.

Әсәкәйем берҙән-берем
Һине бик ныҡ яратам.
Һинең матур исемеңде
Гөл сәскәләргә оҡшатам.
Әсәфемдең ҡулы алтын
Тәмле аштар бешерә
Баҡсабыҙҙа матур-матур
Гөл сәскәләр үҫтерә.

Айҙан,ҡояштан ҡәҙерле
Әсәйем һин генә
Иң матуры, иң яҡшыһы
Әсәйем миңә һин генә

Әсәйҙәрҙең ҙур байрамы
8-се март бөгөн
Байрам булғас, бигерәк йәмле
Барыбыҙҙа шат бөгөн.

Ҡарағыҙ, нисек йәмле
Әсәйҙәрҙең байрамы
Бөтәбеҙҙә шат бөгөн

8 март бөгөн.

Әсәкәйем берҙән-берем
Изге һинең уйҙарың
Яҙғы елдәр кеүек наҙлы
Йомшаҡ ҡына ҡулдарың
Әсәкәйем тауышҡайың
Сылтырап аға шишмәләй
Моңо менән һәр иртәлә
Мине һөйөп иркәләй.

Доньялағы иң ҡәҙерле
Иң бәхетле кеше бул,
Әсәйҙе бәхетле итеү
Балаларҙың эше ул

мин бәхетле, бик бәхетле
Әсәй янында һәр саҡ
Һин булғанға ғына әсәй
Көндәрем яҡты һәр саҡ.

Мама первое слово
Главное слово в каждое судьбе,
Мама жизнь подарила
Мир подарила мне и тебе.

Бөгөн әсәйҙәрҙең байрамы
Бөгөн ерҙә тантана
Ҡояш шуға көлә бөгөн
Гөлдәр шуға шатлана

киң күңелле, саф йөрәкле
Иң уңған,иң мөләйем
Беҙҙең яҡты ҡояшыбыҙ-
Һөйөклө өләсәйем.

Кто открыл мне этот мир,
Не жалея своих сил?
И всегда оберегала
Лучшая на свете мама.
Кто на свете всех милее
И теплом своим согреет
любит больше, чем себя,
это мамочка моя.

Мама дорогая
Я тебя люблю!
Все цветы весенние
Я тебе дарю
Солнце улыбается
Глядя с высота
Ка же это здорово-
У меня есть ты!

.мамина улыбка
Вносит счастья в дом,
Мамина улыбка
Нужна везде,во всем!

мама нас ласкает
Солнце согревает.
Сонце как и мама,
Лишь одно бывает.

мама- солнышко цветочек,
Мама- воздуха глаточек,
Мама- радость, мама смех-
Наша мама лучше всех.

майҙан,ҡояштан ҡәҙерле
Әсәйем миңә һин генә!
Иң нәфис һәм татлы һүҙле
Әсәйем миңә һин генә!
Гөл- сәскәләрҙән яғымлы,
Әсәйем миңә һин генә!
Иң мөләйем шат бәғерле-
Әсәйем миңә

Март айында, ҡар өҫтөндә
Ҡояш нурҙар уйната -
Яҙ килә, ҡаршы алығыҙ -
Тигән хәбәр тарата.

Беҙ беләбеҙ, йылы яҙҙың
Иң беренсе байрамы -
Әсәй, апай, өләсәйҙәр,
Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы!

- Ниңә бөгөн бөтә ерҙә
Сәскәләр балҡый беҙҙә,
Ниңә ҡояш көлөп ҡарай
Шатһығыҙ барығыҙ ҙа?
Бөгөн – Әсәйҙәр байрамы
Бөгөн – ерҙә тантана!
Ҡояш шуға көлә бөгөн
Гөлдәр шуға шатлана

**ҠӘҘЕРЛЕ БАЙРАМ**

Әсәйҙәр байрамы етте,
Һигеҙенсе март бөгөн.
Йылмайған ҡояш яҡтырта
Илемдең аяҙ күген.
Иң тәүге нәфис сәскәләр

Әсәйҙәр өсөн үҫкән.
Яҙғы моңдар, таңғы нурҙар
Шул сәскәләргә күскән.
Юҡ әсәнән бөйөгөрәк,
Изге, ҡәҙерле исем.
Шуға әсәйҙәр байрамы –
Байрам бөтәбеҙ өсөн.
(Г.Юнысова)

**ӘСӘЙҘӘР БЕР ГЕНӘ**
Әсәйҙәр йылмайғас,
Өй эсе йәмлерәк.
Әсәйҙәр бешергән
Аштар ҙа тәмлерәк.
Әсәйҙәр яратҡас,
Шат беҙҙең йөҙөбөҙ.
Әсәйҙәр булғанға
Бәхетле көнөбөҙ.
Әсәйҙәр бер генә –
Ҡәҙерен беләйек.
Йөрәктәр йылыһын
Уларға бирәйек.
(Ә.Әсәҙуллина)

**ӘСӘКӘЙЕМ**
Таң артынан ҡояшҡа
Үрелгән гөлдәй,
Һоҡланам әсәйемә
Гел тәү күргәндәй.
Унан яҡын донъяла
Һис берәү ҙә юҡ.
Унан башҡа йәшәүҙең
Бер йәме лә юҡ.
Ерҙең һулышы йылы
Әсәй булғанға.
Зәңгәр күк йондоҙло

Әсәй булғанда.
(Н.Иҙелбай)

## ӘСӘКӘЙЕМ

Таң артынан ҡояшҡа
Үрелгән гөлдәй,
Һоҡланам әсәйемә
Гел тәү күргәндәй.
Унан яҡын донъяла
Һис берәү ҙә юҡ.
Унан башҡа йәшәүҙең
Бер йәме лә юҡ.
Ерҙең һулышы йылы
Әсәй булғанға.
Зәңгәр күк йондоҙло
Әсәй булғанда.
(Н.Иҙелбай)

## ҠӘҘЕРЛЕ БАЙРАМ

Әсәйҙәр байрамы етте,
Һигеҙенсе март бөгөн.
Йылмайған ҡояш яҡтырта
Илемдең аяҙ күген.
Иң тәүге нәфис сәскәләр
Әсәйҙәр өсөн үҫкән.
Яҙғы моңдар, таңғы нурҙар
Шул сәскәләргә күскән.
Юҡ әсәнән бөйөгөрәк,
Изге, ҡәҙерле исем.
Шуға әсәйҙәр байрамы –
Байрам бөтәбеҙ өсөн.

## ӨЛӘСӘЙЕМ

Өләсәйем ойоҡ бәйләй,
Энәһе ялт-йолт итә.
Итәгендәге йомғағы
Иҙәнгә төшөп китә.

Аҡ бесәйем күреп ҡалып,
Йүгереп барып етә.
“Һә” тигәнсе йомғаҡты
Өләсәйгә йүгертә.
(А.Айытҡолова)

**ҺИҢӘ ОҠШАҺАМ**

Йөҙөң һәр ваҡыт, әсәй,
Ҡояштай балҡып тора.
Һөйәлләнгән ҡулдарың
Нурланып янып тора.
Яғымлы ҡараштарың,
Фәһемле әйткән һүҙең.
Бәхетле булыр инем,
Һиңә оҡшаһам үҙем...
Әсәй, әсәкәйем!
Һин берҙән-берем минең.
Һин – берәү, ә икенсеһе –
Ғәзиз, киң Тыуған илем.
(Г.Ҡоҙабаева)

**ӘСӘЙ**

“Әсәй” тигән оло һүҙҙе
Тәү башлап әйтә бала.
Әсләрҙәй изге йәндәр
Юҡтыр ул был донъяла!
Төндәр буйы йоҡламайса
Әкиәт һөйләгән – әсә.
- Үç, балам, үç тиҙерәк, - тип
Көйҙәр көйләгән әсә.
(Т.Муллағәлиева)

**ИКЕ ӨЛӘСӘЙ**

Ике өләсәйебеҙ бар,
Икеһе лә тиçтерҙәр.
Беренсеһе атайымды,

Икенсеһе әсәйемде
Кеше итеп үҫтергән.
Ике өләсәйебеҙ бар,
Икеһен дә яратабыҙ,
Уларға эш ҡалдырмайбыҙ,
Бик бойоҡҡан саҡтарында
Ҡайғыларын таратабыҙ,
Икеһен дә яратабыҙ!
(Ф.Рәхимғолова)

**ӘСӘ КҮҢЕЛЕ**
Әсә күңелен диңгеҙ тиҙәр,
Унда күпме ынйы бар!
Һөйөп, ҡәҙерләп үҫтергән
Бала өсөн саф мөхәббәт
Ынйылары бит улар!
Әсә күңелен дала тиҙәр,
Ул тылсымлы, киң дала.
Ошо күңелдән башлана
Һәр кемдең дә ҙур бәхеткә
Аҡ юлдары донъяла!
Әсә күңелен ҡояш тиҙәр,
Унда күпме яҡтылыҡ!
Шул күңелдең яҡтыһынан
Тормош тағы балҡып китә,
Ерҙә арта яҡшылыҡ!
(А.Игебаев)

**ӘСӘЙГӘ БҮЛӘК**
Әсәһенә бүләк итеп
Сәлим ҡуян төшөргән.
Гөлшат менән Зәйнәп икәү
Тәмле күмәс бешергән.
Әсәйем: “Балам, һин дә
Миңә бүләк бирҙең, - ти, -
Көнө буйы һүҙҙәремде
Тыңлап ҡына йөрөнөң”, - ти.
(Ф.Рәхимғолова)